КОНТРОЛЬНЫЙ ЭКЗЕМПЛЯР

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

Эҙәрлектә БАЙРАҒЫ

Газета 1931 йылдың 1 ноябренән сыға

Башҡорт АССР-ы КПСС-тың Хәйбулла район комитеты һәм халыҡ депутаттарының район Советы органы

№ 65 (6504) 1988 йыл, 2 июнь, есаҙна Хаҡы 3 тин.

КПСС Үҙәк Комитеты Тезистарын тикшерәбеҙ

ҠАЙНАР ХУПЛАЙҘАР

«ХӘЙБУЛЛА» совхозының Иҫәнгилде фермаһы малсылары XIX Бөтә Союз партия конференцияһына КПСС Үҙәк Комитеты Тезистарын күтәренке рухта, йәмғиәтте үҙгәртеп ҡороу, киң биллдәлелек һәм демократлаштырыу яҙмышы өсөн яуаплылыҡ тойғоһо менән ҡабул итте. Улар Тезистың һәр пунктын ярҙылап өйрәнәсәк.

— Тезистарҙың бөтә 10 пункты ла үҙгәртеп ҡороуҙы артабан тәрәнәйтеүгә йүнәлтелгән, — тип һөйләй ферма бригадиры Г. Иҫәнгилдин. Үҙгәртеп ҡороу мәсьәләләре буйынса саралар билдәләнгән.

Үҙгәртеп ҡороу был коллективҡа ла ҡағылған. Коллектив подрядҡа күсеү менән кешеләрҙең хеҙмәткә мөнәсәбәте үҙгәрә, хеҙмәт дисциплинаһы нығый бара, малсылыҡҡа эшкә йәш көстәр килә. ВЛКСМ ағзаһы Батыр Изиков менән Роза Ласыновалар машина менән һауыу операторҙары булып эшләй башлаған.

— Һауынсылар араһында пенсия йәшенә етеүселәр бар. Фермала уларҙы алыштырырлыҡ йәштәрҙең булыуына шатбыҙ. — тип һөйләй бригадир.

Яңы шарттарҙа хеҙмәтсәндәрҙең тормош кимәлен күтәреү өсөн бөтә мөмкинлектәр ҙә бар. Ҡыҫҡы осорҙа, коллектив подрядҡа күскәнгә тиклем, һауынсыларҙың айлыҡ эш хаҡы 120—130 һумдан артманы, бөгөн иһә улар 250—280-шәр һум ала. Ләкин был сик түгел. Йыллыҡ һөҙөмтәләр буйынса, коллектив артыҡ тотоноуҙарға юл ҡуймаған булһа, расчет артасаҡ.

Коллектив ағзаларының яҡшыраҡ эшләргә, иген фуражын экономлыраҡ тотонорға, инвентарҙы, хеҙмәт ҡоралдарын һаҡсыл файҙаланырға тырышыуы ҡыуаныслы хәл. Улар үҙ хеҙмәттәренең мәғәнәһен тап бына шунда күрә.

И. ҠОҘАБАЕВ.

АЛДЫНҒЫ ЭШСЕЛӘРГӘ ӨҘТӨНЛӨК БИРЕРГӘ

XIX Бөтә Союз партия конференцияһына КПСС Үҙәк Комитетының Тезистарын уҡыҡанда ундағы фекерҙәрҙең реаль буласағына өмөт итеп ышанып ҡарайһың. Мин партия комитетына кандидатуралар һайлауҙы күҙҙә тотам. Элегә ул биләгән вазифа буйынса ғәмәлгә ашырыла. Әгәр район күләмендә партия комитеты бюроһы составына Совет, РАПО, халыҡ контроле, комсомол вәкилдәрен раҫлаһалар, түбәнге партия ойошмаларында ла ошо уҡ положение буйынса эш итәләр.

Партия комитеттары составтарына кешеләр һайлағанда работниктың биләгән вазифаһы түгел, ә уны идея, әхләҡи һәм эшлекле сифаттары, политик абруйы, үҙгәртеп ҡороу өсөн көрәштә актив позицияһы тәп урынға ҡуйылырға тейешлеге тураһындағы фекер менән ризамын. Беҙҙә әлекке хеҙмәте менән маһайған, әммә ҡулынан бер нәмә лә килмәгән кешеләр байтаҡ. Партия органы составына эшлекле, хеҙмәт коллективы производство алдынғылары, инициаторҙары һайланырға тейеш. Бөтә секретарҙарға һәм штатлы работниктарға һис шикһеҙ КПСС райкомы бюроһы составында булырға тимәгән, күберәк урындарҙағы хәлдәрҙе яҡшы белгән, уларҙың мәнфәғәтен яҡлаған, партия идеяларын массаларға оператив еткерә алған производство эшсәндәре һайланһын ине. Һуңғы пленумда эшселәр сыныфынан М. Н. Никитиндың райком бюроһы ағзаһы итеп һайланыуы быға миҫал булып тора.

И. НОРЕЦ,
«Таналыҡ» совхозының партком секретары.

СОВЕТТАРҘЫҢ РОЛЕ АРТАСАҠ

Тезистарҙағы положениеларҙы тормошҡа ашырыу, халыҡ вәкилдәренең тулы власы органдары булараҡ, халыҡ депутаттары Советтарының ролен һәм полномочиеһын тулы күләмдә яңыртыуын билдәләп үтергә теләйем.

Әлегә Советтар, биҙгәрәк тә уларҙың түбәнге звенолары, тулы үҙаллылыҡҡа әйә түгеллеген һыҙыҡ өҫтөнә алырға кәрәк, тулы власлы булыу тураһында әйтеп тораһы ла юҡ. Күп кенә ойошмалар ауыл Советтары өҫтөнән етәкселек итеп маташа. Шул сәбәпле ауыл Советтары башҡарма комитеттары работниктары, теләһә нинәй кәҫәшмәләргә йөрөп, ваҡыттарын әрәм итә. Был ойоштороу һәм масса эшен алып барыу мөмкинлеген бирмәй.

Һайлауға әҙерлек һәм уны үткәреү Советтар работниктарының байтаҡ ваҡытын ала. Бөтә халыҡ депутаттары Советтары өсөн полномочиеларҙың берҙәм срогын (биш йыл) билдәләү тураһында әйтелеүҙе мин бик урынлы тип иҫәпләйем. Был уларға бөтә яҡтан мөһим политик кампанияға ентекле һәм яҡшыраҡ әҙерләнергә, уны, әлек була торғанса, бөтә халыҡ байрамы кеүек итеп юғары кимәлдә үткәрергә мөмкинлек бирәсәк.

Советтарҙа мәсьәләләрҙе ентеклерәк һәм компетентлы тикшереү өсөн уларҙың сессияларының дауамлылығын арттырыу күҙҙә тотола. Бындай положение республика һәм район күләмендәге Советтарға ҡаҡлы. Ауыл, поселок Советтары өсөн сессияара срогын арттырыу һәм уны йылына өс мәртәбә саҡырыу мәҡсәткә яраҡлы булыр ине.

З. НУРАЕВА,
Маҡан ауыл Советы башҡарма комитеты председателе.

Активистар семинары

1 июндә халыҡ депутаттарының район Советы башҡарма комитетында семинар булып үтте. Унда халыҡ депутаттарының ауыл һәм поселок Советтары башҡарма комитеттары, административ комиссиялар, эскелеккә һәм алкоголизмға ҡаршы көрәш буйынса комиссиялар, ауыл башҡарма комитеттары янындағы йәмәғәт башланғысындағы балиғ булмаған балаларҙың эштәре буйынса инспекциялар, ингәштәр судтары, ҡатын-ҡыҙҙар советтары, айыҡлыҡ өсөн көрәш йәмғиәте председателдәре, РОВД янындағы балиғ булмаған балаларҙың эштәре буйынса инспекция работниктары, халыҡ дружиналары командирҙары һәм башҡа үҙәшмәкәр йәмәғәт ойошмалары етәкселәре ҡатнашты.

Семинарҙа ҡатнашыусылар алдында райсовет башҡарма комитеты председателе урынбаҫары Ш. М. Байгусҡаров — «Башҡарма комитеттар янындағы комиссиялар һәм башҡа йәмәғәт ойошмалары эшен ойоштороу тураһында», эске эштәр бүлеге начальнигы С. Д. Зәйнуллин — «Хоҡуҡ тәртибен һәм социалистик законлылыҡты нығытыу буйынса эштең торошо һәм саралар, йәмәғәт ойошмаларының бурыстары тураһында», район халыҡ судьяһы Д. С. Хәйретдинов — «Административ тәртип боҙоуҙар һәм ауыл Советтары башҡарма комитеттарының законды ҡулланыуы тураһында» һәм «Ингәштәр судтарының эше тураһында», район прокуроры И. М. Торомтаев — «Эскелеккә һәм эшләмәй доход алыуҙарға ҡаршы көрәште көсәйтеү тураһындағы закондарҙы ҡулланыу тәртибе тураһында», РОВД янындағы балиғ булмаған балаларҙың эштәре буйынса инспектор Р. Ш. Сыҡҡызов — «Ауыл һәм поселок Советтары башҡарма комитеттары янында йәмәғәт башланғысындағы инспекцияларҙың эше тураһында», агропромышленность комплексы работниктары профсоюзы райкомы секретары В. И. Овчинников — «Хеҙмәт дисциплинаһын нығытыуҙа ингәштәр судтарының роле», райсовет башҡарма комитетының социал-тәьминәт бүлеге мөдире, райондың ҡатын-ҡыҙҙар советы председателе М. М. Кәримова «Ҡатын-ҡыҙҙар советтарының эше тураһында» сығыш яһаны.

Зыянһыҙ эшләйек

Һауын һыйырҙарҙы йәйге лагерҙарға сығарыу менән Салауат исемендәге колхозда һауым һиҙелерлек артты. Колхоз буйынса тәүлегенә уртаса 13,7 килограмм һөт һауып алына, ә Аҡназар фермаһы малсылары был күрһәткесте 14,1 килограмға еткерҙе.

Арзан мал аҙығы, аҙ тотоноуҙар иҫәбенә һыйырҙарҙы өҫтәмә туҡландырғанда ғына юғары һөҙөмтәләргә өлгәшергә мөмкин. Бөгөнгө көндә иген фуражы запасы бик аҙ ҡалды һәм малдарға уны бик аҙлап ҡына бирәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта йәшел аҙыҡ та тиҙ арала киҫелерәлмәйәсәк. Шуға күрә бөгөнгө көндә бөтә нимә малсыларҙың тырышлығына бәйле.

Май айында Ғәлиәхмәт фермаһынан тыш колхоздағы бөтә фермаларҙың дәүләткә продукцияны тик беренсе сорт менән генә оҙатыуҙарын билдәләп үтергә кәрәк. Ғәлиәхмәт фермаһы малдары араһында туберкулез ауырыуы барлығы асыҡланды, шуға күрә һөт тик икенсе сорт менән генә тапшырыла. Был осраҡта һәр центнер өсөн 2,2 һум аҡса юғалтыла.

Малсылар күп һөт аҙыу өсөн генә түгел, ә уны аҙыраҡ тотоноуҙар менән етештерергә тырышырға, түбән сифатлы продукция тапшырыу һөҙөмтәһендә зыян күреүгә юл ҡуймаҫҡа тейеш.

Р. ИСҠУЖИН,
колхоз экономисы.

Эшһеҙәр

Ленин исемендәге колхоздың йәш шоферы ВЛКСМ ағзаһы Вәлишә Ҡужагилдин яҙғы баҫыу эштәре барышында сәсеү агрегаттарын орлоҡ менән тәьмин итеп торҙо. Уның эшһөйөүсәнлеге, дисциплиналылығы яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта тамамлауға булышлыҡ итте.

ҺҮРӘТТӘ: комсомолец Вәлишә Ҡужагилдин.

Р. БАЙМУРЗИН фотоһы.

Киләсәккә өмөт менән

«Һаҡмар» колхозы фермаларында хәҙер һауымды арттырыу өсөн иң уңай ваҡыт. Көтөүлектәрҙәге йәшел үлән, малдарҙы һуғарыу өсөн уңайлы урындар эшкә файҙа ғына килтерә. Һауынсылар, малсылар, бөтәһе бер булып, шунан файҙаланып ҡалырға тырыша.

Коммунист Мәүә Күскилдинаның исеме алдынғы һауынсылар иҫәбендә килә. Ул Зур Арысланғол һөтсөлөк фермаһында эшләй. Уның төркөмөндә 25 тана һыйыр. Урман зонаһы шарттарында, ҡағизә булараҡ, улар тәүге йылда һөттө насар бирә. Шуға ҡарамаҫтан, М. Күскилдина әхирәттәренән ҡалышмаҫҡа тырыша.

Хәҙер һауын көтөү йәйләүҙәрҙә, көтөүлектәргә яҡын аҫырала. Был да шулай уҡ көндәлек һауымды арттырыуҙа стимул булып тора.

— Тана һыйырҙан һауым буйынса конкрет заданиелар бирелмәй, — ти М. Күскилдина. — Әммә мин айлыҡ күрһәткестәр башҡаларҙан насар булмаһын өсөн тырышам. Дөрөҫ, ул ҙур бирелмәй, әммә йыллыҡ һөҙөмтәләрҙең насар булмаясағына ышанам.

Эйе, коммунист М. Күскилдина яҡшы ниәттәр менән эшләй. «Һаҡмар» колхозы эшсәндәре лә XIX Бөтә Союз партия конференцияһын яҡшы күрһәткестәр менән ҡаршыларға тырыша.

И. СӨЛӘЙМӘНОВ.

КПСС райкомының XI пленумы

Белем биреүҙе үҙгәртеп ҡороу—

(КПСС райкомының беренсе секретары М. Х. Шаһиевтың докладыы)

ЯҢЫРТЫУ ПРОЦЕСЫ БАРА

КПСС Үҙәк Комитетының (апрель 1985 йыл) Пленумынан һуң өс йыл йәмғиәтте, кешеләрҙең күңелен рухи яҡтан яңыртыу процесы бара, тине докладсы. Радикаль хужалыҡ реформаһы ғәмәлгә ашырыла. Төп социаль бурыстарҙы хәл итеүҙә яҡшы яҡҡа һынылыш һиҙелә, яңыса политик фекерләү ныҡлы урын ала бара.

Бөтә йүнәлештәрҙә лә үҙгәртеп ҡороу, фекер һәм эш итеү образы буларак, йәмәғәт аңы характерын һәм беҙҙең бөтә практик эштәрҙең үҙенсәлеген билдәләп, тормошобоҙға тәрәнерәк үтеп инә. КПСС Үҙәк Комитетының февраль (1988 йыл) Пленумында билдәләнеүенсә, уҙған өс йылдың политик йомғағы шунда ла инде.

Хәҙерге осорҙоң ғәҙәттән тыш мөһимлеген иҫәпкә алып, партияның Үҙәк Комитеты шундай һығымтаға килде: үҙгәртеп ҡороуҙы идеологик яҡтан тәьмин итеү, яңыса фекерләү, үҙгәртеп ҡороуҙың асылына төшөнөү хәҙер төп әһәмиәткә эйә.

КПСС Үҙәк Комитетының был күрһәтмәләре дөйөм белем биреү һәм профессиональ мәктәптәр реформаһын ғәмәлгә ашырыуға ла тулыһынса ҡағыла. Ул бөгөн иң мөһим һәм дәүләт бурыстары рәтенә ҡуйылған, үҙгәртеп ҡороуҙың бөтә идеологияһы теҡсына индерелгән.

Был беҙҙән, КПСС Үҙәк Комитетының февраль Пленумы күҙләгәнсә сығып, дөйөм белем биреү һәм профессиональ мәктәптә, мәктәпкәсә йәштәге балалар һәм мәктәптән тыш балалар учреждениеларында эштәрҙең торошона талапсан, тәнҡит күҙлегенән анализ яһауҙы, уларҙың үҫешендә сифатлы үҙгәрештәр булдырыуҙы талап итә. XIX Бөтә Союз партия конференцияһына КПСС Үҙәк Комитеты Тезистарында билдәләнеүенсә, уны хәл итеүҙә хужалыҡ органдарының, халыҡ мәғарифының бөтә звеноларының, киң йәмәғәтселектең урынын билдәләп, был мәсьәләгә дөйөм партия һәм бөтә халыҡ эше итеп ҡарарға кәрәк.

Район халыҡ мәғарифында бөгөн эштәрҙең торошо нисек һуң?

КПСС райкомы пленумына әҙерлек барышында мәктәп реформаһын тормошҡа ашырыу буйынса партия ойошмалары, совет, хужалыҡ органдарының эше бөтә яҡлап өйрәнелде. КПСС райкомы бюроһы, райсовет башҡарма комитеты, партия райкомының информация - пропаганда группалары ағзаларының уҡыусылар, уҡытыусылар коллективтары, ата-әсәләр активы, база хужалыҡтары һәм предприятиелар етәкселәре менән осрашыуҙарында күп кенә эшлекле тәҡдимдәр, тәнҡитле иҫкәрмәләр әйтелде.

РАЙОНДЫҢ ХАЛЫҠ МӘҒАРИФЫ СИСТЕМАҺЫ

Бөгөн ул 16 урта, 18 һигеҙ йыллыҡ, 20 башланғыс мәктәптәрҙе, 110-сы СПТУ-ны, 30 мәктәпкәсә йәштәге балалар учреждениеһын, балалар һәм үҫмерҙәрҙең спорт мәктәбен, район пионерҙар йортон һәм балалар туристик базаны берләштергән киң тармаҡлы комплексты кәүҙәләндерә. Уларҙа 5738 бала белем ала, 2200-ҙән ашыу мәктәпкәсә йәштәге бала (йәлеп итеү проценты—74,4) тәрбиәләнә, 750 педагогия работнигы уҡытыусы һәм тәрбиәсе булып эшләй.

Бынан дүрт йыл элек башланған мәктәп реформаһы, тине докладсы, белем биреү системаһы кимәлен күтәрергә, уның материаль базаһын нығытырға булышлыҡ итте. Партия, совет органдары уның ихтыяждарына иғтибарлыраҡ була башланы. Һөҙөмтәлә һуңғы өс йылда Вәлит һигеҙ йыллыҡ (192 уҡыусыға иҫәпләнгән), Самар урта (340 балаға) мәктәптәре бинаһы, Степной посёлогында (90 урынлы) типовой балалар баҡсаһы бинаһы төҙөлдө. 110-сы профтехучилищеның уҡыу корпусы һәм дөйөм ятағы төҙөлә.

Ләкин реформаны ғәмәлгә ашырыу йылдарында район мәктәптәренең материаль базаһын нығытыуҙа сифат яғынан алға китеш булманы.

Урта һәм һигеҙ йыллыҡ мәктәптәрҙең 48 һәм мәктәпкәсә йәштәге балалар учреждениеларының 49 проценты ғына типовой һанала. Күп кенә урта, һигеҙ йыллыҡ (Бүребай, Маҡан, Уфимск, Ергән, Степной урта, Баколовка, Иләс, Садовый, Һултанғужа, Савельевка, Юлбарыҫ, Яковлевка һигеҙ йыллыҡ мәктәптәре) һәм күпселек бәләкәй комплектлы башланғыс мәктәптәр типовой булмаған, ҡулайлаштырылған йәки иллеенсе йылдарҙа төҙөлгән иҫке биналарға урынлашҡан, бөгөн класс бүлмәләре, ашхана, ял итеү, уйын һәм спорт залдары, уҡыу мастерскойҙары биналары етешмәй. Шул сәбәпле урта һәм һигеҙ йыллыҡ мәктәптәр уҡыусыларының өстән бер өлөшө ике сменала шөғөлләнә. Бынан тыш, Әбеш һәм Сәғит мәктәптәре биналары емерелергә тора. Алты йәштәге балаларҙы уҡытыуға аҡрынлап күсеү ҙә был мәктәптәргә өҫтәмә ҡыйынлыҡтар тыуҙырҙы.

Мәктәпкәсә йәштәге балалар учреждениелары ла шундай уҡ хәлдә тиерлек. 10 балалар баҡсаһы ҡулайлаштырылған бинаға урынлашҡан, Ергән, Атингән, Вәлит ауылдарындағы балалар баҡсалары санитар-гигиена нормаларына яраҡлы түгел, район үҙәгендәге 1-се һанлы һәм Самар ауылындағы балалар баҡсалары биналары ныҡ иҫкергән.

Хәл үтә ауыр һәм, эшҡе кисектергеһеҙ юлға һалыу өсөн, ул конкрет саралар талап итә. Ләкин шуға ҡарамаҫтан, районның күп кенә партия комитеттарында, ауыл Советтары башҡарма комитеттарында ғәмһеҙлек хөкөм һөрә, мәктәп төҙөлөшөн тиҙләтеү өсөн эске ресурстар эҙләнмәй һәм тупланмай. Һөҙөмтәлә һуңғы биш йыллыҡта районда хужалыҡ ысулы менән бер типовой мәктәп тә төҙөлмәне.

Вәлит һәм Иҫәнгилде һигеҙ йыллыҡ мәктәптәре базаһында «мәктәптәр-балалар баҡсалары» ойоштороға ҡарар ҡабул итеп, «Хәйбулла» совхозы парткомы һәм дирекцияһы яҡшы инициатива күрһәткәйне. Ләкин алты йәшлек балаларҙы уҡытыуға күсеү сәбәпле, булған уҡыу кабинеттары, класстар менән был тәҡдимде тормошҡа ашырыу ҡыйынлаша, әйтеп үтелгән мәктәптәр биналарына төкөтмәләр төҙөргә кәрәк.

Әгәр балалар учреждениеларын үҙәкләштерелгән дәүләт капитал һалыу линияһы буйынса һәм подряд төҙөлөш ойошмаларының көсө менән төҙөүгә өмөт итһәк, бик оҙаҡ көтөргә тура киләсәк. Мәҫәлән, ағымдағы биш йыллыҡта үҙәкләштерелгән дәүләт капитал һалыуҙар иҫәбенә төҙөлөш ойошмалары эштәре программаһына Әбеш урта мәктәбен төҙөү генә индерелгән, ул 1989 йылда төҙөлә башланасаҡ.

КПСС Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарарҙары нигеҙендә база предприятиелары һәм мәктәптәр менән үҙ-ара мөнәсәбәттең башҡа мәсьәләләрендә лә үҙ позицияларыңды ҡайтанан, «База предприятиелары тураһында положениелар» күрһәтмәләренә ныҡлы таяныға, үҙ-ара шефлыҡ ярҙамын көсәйтергә кәрәк. Әгәр 1987 йылда мәктәптәр ихтыяждарына «Маҡан» совхозы тарафынан 12 мең һум, «Красный доброволец» колхозы — 9000, Ленин исемендәге колхоз—3000, «Степной» совхозы — 2000 һум аҡса, Калинин исемендәге колхоз төҙөлөш материалдары бирһә, ҡалған хужалыҡтар һәм база предприятиелары, үҙҙәренең финанс ҡыйынлыҡтарына һылтанып, үҙ мәктәптәренә ярҙам күрһәтеүҙән баш тартты. Бындай «экономия» урынһыҙ. Мәғариф өлкәһенә индерелгән пәр һум аҡсаның бер нисә тапҡырға артыҡ файҙа килтереүен онотторға ярамай. Бөгөнгө көн һәм файҙа күреү менән генә йәшәргә ярамай, бөтәбеҙгә лә йәшәргә һәм эшләргә, киләсәк хаҡында фекер итергә өйрәнергә заман талаптарына яуап биргән нормаль шарттар тыуҙырыу өсөн, һәр мәктәптең, балалар учреждениеһының хәлен бөгөндән ентекләп ҡайтанан ҡарарға кәрәк.

Мәктәп партия комитеттары һәм хеҙмәт коллективтарының хәстәрлек үҙәге булды һәм булып ҡала. Был бөтә етәкселәр өсөн дә ныҡлы ҡағиҙәгә әүерелергә тейеш. Мәктәп проблемаларына ҡарата мөнәсәбәт буйынса беҙҙең партиялылыҡ һәм политик өлгөргәнлек тикшереләсәк.

Шул сәбәпле, тине докладсы, мәктәптәргә ремонт үткәреүгә, мәктәптәрҙе, уҡыу биналарын файҙаланыу йәһәтенән махсуслаштырылған ремонт-төҙөлөш ойошмалары, предприятиелары, бөтәһенән элек хужалыҡ-эксплуатация контораһы һәм «Башремстрой» берекмәһенең Бүребай участкаһы яғынан ярҙам күрһәтеүҙе һәм булышлыҡ итеүҙе көсәйтергә кәрәк. Ләкин бөгөн был ойошмалар ҡеүәтле түгел, кадрҙар менән комплектланмаған, производство базалары юҡ, нигеҙҙә төҙөлөш материалдары биреү менән генә шөғөлләнәләр. Райсовет башҡарма комитетына (Хәйбуллин, Червоченко), РОНО-ға (Илембәтова) ойошмаларҙың ҡеүәттәрен нығытыу һәм үҫтереү юлдарын эҙләргә кәрәк. Бүребайҙағы яңы ремонт-төҙөлөш участкаһын нығытыуҙа беҙ КПСС райкомы ағзалары Сандриков менән Журавлевҡа ҙур өмөт бағлайбыҙ.

УҠЫТЫУСЫ — МӘКТӘПТӘ ТӨП ФИГУРА

Һәр эштең уңышы беренсе сиратта кадрҙарға бәйләнгән. Мәктәпте, тимәк, партия иғтибарын үҙгәртеп ҡороуҙа уҡытыусы төп фигура булып һанала. Ул — ойоштороусы, илһам биреүсе һәм мәктәптә үҙгәртеп ҡороуҙа туранан-тура ҡатнашыусы ла. Уның шәхесе, профессиональ квалификацияһы, культура кимәле, ниһәйәт, кешелек сифаты күбеһенсә уҡыусыларҙың йөҙөн билдәләй.

Районда РСФСР һәм БАССР мәктәптәренең 12 атҡаҙанған уҡытыусыһы, 48 халыҡ мәғарифы отличнигы, 12 уҡытыусы-методист, 22 өлкән уҡытыусы ышаныслы терәк, бөтә уҡытыусылар өсөн эштә өлгө булып тора. Докладсы П. Г. Назаров, Т. С. Кузнецова, А. В. Әхмәтова (Уфимск урта мәктәбе), Л. Х. Йәрмөхәмәтова, Т. Ф. Хухлова (Подольск), Т. А. Резанова (2-се Аҡъяр мәктәбе), В. В. Владимиров (Бүребай), Г. С. Аслаева (Мәмбәт) һәм башҡаларҙы телгә алып үтте.

Ләкин шул уҡ ваҡытта мәктәптең балаларға төплө дөйөм белем биреү, һәм шул нигеҙҙә уларҙың уҡыуҙарын уңышлы дауам итеүенә, производствола эшләп китеүенә ярҙам итеү йәһәтенән үҙенең төп бурысын насар хәл итеүе ҙур борсолоу тыуҙыра.

Мәҫәлән, йыл һайын юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүселәрҙең өстән бер өлөшө генә конкурс имтихандарын тапшыра. Ғәлиәхмәт, Ивановка, Мәмбәт урта, Иләс, Иҫәнгилде һигеҙ йыллыҡ мәктәптәренең педагогия коллективтарының эш һөҙөмтәләре бигерәк насар.

110-сы СПТУ-ла ла эштәр бигүк яҡшынан түгел. Училищены тамамлаусыларҙың профессиональ әҙерлеге йыш ҡына йомшаҡ була, производство технологияһын, хужалыҡ итеүҙең экономик методтарын, экономик реформаның йөкмәткеһен белмәйҙәр.

Быларҙың бөтәһе белем биреүҙе тамырынан үҙгәртеп ҡороу, уҡытыусыларҙы педагогия хеҙмәтенең прогрессив формалары һәм методтары менән ҡоралландырыу кәрәклеге тураһында һөйләй. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, халыҡ мәғарифы бүлеге (Илембәтова), 110-сы СПТУ (Рыбаков) һәм мәктәптәр етәкселәре ошо йүнәлештә сифат яғынан һиҙелерлек үҙгәрештәргә өлгәшмәнеләр әле. Улар приказдар һәм инструкцияларҙың сихырлы көсөнә буйһоноп эш итеүҙән, уҡыу процессы сифатын күтәреүгә йоғонто яһамаған формаль тикшереүҙәрҙән бер нисек тә ҡотола алмайҙар.

КПСС райкомы аппараты работниктары (Ғәбитова) педагогия коллективтарында һирәк була, мәктәптәрҙә партия-политик хәлдәрҙең торошон белеп бөтмәй. Беҙҙең хәл ителмәгән проблемалар, мәктәп реформаһындағы етешһеҙлектәр һәм ауырлыҡтар тураһында принципиаль һәм асыҡтан-асыҡ һөйләшеү алып бармай, уларҙы хәл итеү буйынса конкрет ярҙам күрһәтмәй.

Мәктәп эше мәсьәләһе —һәр партия работнигы өсөн мөһим политик мәсьәлә. Һәр уҡытыусы, тәрбиәсе яңыса йәшәһен, эшләһен һәм фекер итһен, уларҙың һәр береһе мәктәп реформаһы яҙмышы өсөн шәхси яуаплылыҡ тойһон өсөн беҙҙең бөтәбеҙгә лә йәнле ойоштороу һәм тәрбиә эше алып барырға кәрәк.

Уҡытыусыға юғары талаптар ҡуйып, уның тураһында хәстәрлек күрергә лә кәрәк. Был хәстәрлек дөйөм һәм киң булырға тейеш. Уҡытыусыларҙың көнкүреше тураһындағы мәсьәләне айырыуса билдәләп үтергә кәрәк.

Һуңғы ике йылда мәктәптәр һәм мәктәпкәсә йәштәге балалар учреждениеларының 37 работнигы торлаҡ шарттарын яҡшыртты йәки квартира алды. Ләкин торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға халыҡ мәғарифының тағы ла 86 уҡытыусыһы һәм башҡа работнигы мохтажлыҡ кисерә. 61 работник кешелә квартирала һәм дөйөм ятаҡта йәшәй. Атингән, Аҡъяр, Аҡъюл, Таналыҡ, Целинный, Татыр-Үҙәк ауыл һәм Бүребай посёлок Советтары территорияларында йәшәгән уҡытыусыларҙың квартира проблемаһы ҙур.

Торлаҡ-көнкүреш шарттары ҡәнәғәтләнерлек булмағанлыҡтан райондан йыл һайын 20-нән ашыу уҡытыусы китә. Ә шул уҡ ваҡытта беҙҙә педагогия кадрҙары етешмәй. Һуңғы биш йылда бер генә уҡытыусының да үҙ аҡсаһына өй төҙөп ултыртмауы нормаль күренеш түгел. Уларҙың мөмкинлектәре тураһында әйтеп тороуҙың кәрәге юҡ.

Ҡайһы бер хужалыҡтарҙа һәм ауыл Советтарында халыҡ мәғарифы работниктарын яғыулыҡ, мал аҙығы, иген, бесәнлек һәм башҡа хеҙмәт төрө менән тәьмин итеүгә тейешле иғтибар бирелмәй.

Салауат исемендәге колхоз идараһының (Ҡырымғужин), колхозсыларҙы иген менән тәьмин итеп, уҡытыусыларҙы көҙ уңынан төшөрөп ҡалдырыуы бөтөнләй яраҡһыҙ эш. Был мәктәптә кадрҙарға ҡытлыҡ кисереүҙәре осраҡлы хәл түгел.

Уҡытыусы идеологик фронттың алғы сафында булды һәм булырға тейеш, ул — партия ҡарарҙарын тормошҡа ашырыуҙа, аңлатыу һәм культура - масса эшен алып барыуҙа, хеҙмәт коллективтарында һәм йәшәгән урын буйынса кире күренештәргә ҡаршы көрәштә актив политик боец.

Уфимск урта мәктәбе директоры Нурулла Ғәбитович Кәлимуллин, Целинный урта мәктәбе уҡытыусыһы Юлай Мөхәмәтович Аҡбалин, Байғусҡар һигеҙ йыллыҡ мәктәбе директоры Мөхәмәт Ғәлиевич Байдәүләтов, Әбүбәкир һигеҙ йыллыҡ мәктәбе уҡытыусыһы Ләлә Хәйрединовна Сынбулатова агитация-масса, пропаганда һәм тәрбиәүи саралар уҙғарыуҙа партия ойошмаларының актив ярҙамсылары һәм терәге булып һанала.

Ләкин ҡайһы бер уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр, эштәре күплеккә һылтанып, партия ойошмаларының йәмәғәт порučениеларын үтәүҙән ҡасырға, колхоз йәки совхоз тормошонан ситтә ҡалырға тырыша. Әбеш, Ивановка, Целинный урта, Һултанғужа, Бакаловка, Иләс һигеҙ йыллыҡ мәктәптәренең педколлективтарына шундай позиция хас.

Педагог — үҫеп килгән быуынды ғына түгел, уларҙың ата-әсәләрен дә тәрбиәләүсе. Ул үҙенең актив тормошсан позицияһы менән һәр ерҙә һәм бөтә нәмәлә уҡыусылар һәм өлкәндәр өсөн өлгө булырға тейеш. Халыҡ уҡытыусыһы тигән юғары исемде йөрөтөп, үҙе лайыҡһыҙ йәшәгән кешенән ниндәй өлгө алаһың. Мәҫәлән, Быҙаулыҡ һигеҙ йыллыҡ мәктәбенең даими эскелек менән шөғөлләнеүсе элекке уҡытыу бүлеге мөдире Ә. М. Туҡбаев, йәки автотранспорт средствоһы менән эскән килеш идара иткән өсөн тотолған Һултанғужа һигеҙ йыллыҡ мәктәбе уҡытыусыһы Р. Р. Собханғолов, автомобиль менән эскән килеш идара иткән өсөн уголовный яуаплылыҡҡа тарттырылған РОНО инспекторы Н. В. Запольских, бал ҡойғаны һәм балаларға ризыҡты биреп еткермәү иҫәбенән артыҡ продукттар булдырғаны өсөн административ яуаплылыҡҡа тарттырылған Әбүбәкир балалар баҡсаһы мөдире З. Н. Әбүбәкирова үҙҙәренең тәрбиәләнеүселәренә һәм уларҙың ата-әсәләренә ниндәй ыңғай өлгө күрһәтә алһын. Ә бит был кешеләргә балаларҙы тәрбиәләү, уҡытыу-тәрбиә процесын ойоштороу һәм уның торошо өсөн контроль ҡуйыу ышанып тапшырылған. Балаларҙы тәрбиәләү һәм уҡытыу менән ошондай педагогтар шөғөлләнмәһен өсөн бөтәһен дә эшләргә кәрәк.

МӘКТӘПТӘ ҮК ХЕҘМӘТ КҮНЕКМӘЛӘРЕНӘ ӨЙРӘТЕРГӘ

Февраль Пленумы, тип дауам итте М. Х. Шаһиев, йәштәрҙе хеҙмәткә әҙерләүҙә көрәлөш осорҙарын билдәләне. Бөгөн мәктәптән массовый профессиональ әҙерлекле эшсе кадрҙар әҙерләү бурысы алына, ләкин бында һүҙ тәрбиәләүҙә хеҙмәт башланғысын йомшартыу тураһында бармай. Хеҙмәт төп тәрбиәсе булды һәм булып ҡала. Быны аңлап, партия комитеттары, хужалыҡ етәкселәре, совет органдары хеҙмәт һәм педагогия коллективтары ҡатнашлығында хеҙмәткә өйрәтеүҙең материаль базаһын булдырыу, уҡыусыларҙы етештереүсәнле хеҙмәткә йәлеп итеү өсөн байтаҡ эш башҡарҙы.

14 мәктәптә трактор-

Дөйөм партия, бөтә халыҡ эше

КПСС райкомының XI пленумы

сы-машинистар, 6 мәктәптә машина менән һауыу операторҙары, ике мәктәптә водителдәр һәм автослесарҙар әҙерләнә. 2-се һанлы Аҡъяр урта мәктәбенең өлкән класс уҡыусылары, автомобиль йөрөтөргө өйрәнеүҙән тыш, газосварщик һәм биҙәкләүсе һөнәрҙәренә өйрәнә, ә Бүребай урта мәктәбе уҡыусылары тегенсе танытмаһы ала.

Ләкин бөгөн уҡыусыларҙың профессиональ әҙерлек кимәле заман талаптарына яуап бирмәй. Уҡыусыларҙың 40 проценты ғына тракторҙа, 10 проценты автомашинала эшләүгә хоҡуҡ ала. Сәбәбе асыҡ—материаль база йомшаҡ. Уфимск, Ивановка һәм Маҡан урта мәктәптәрендә генә практик занятиелар өсөн кабинеттар бар. Ергән һәм Степной урта мәктәптәрендә профессия биреүҙең тулы комплексын тыуҙырырға кәрәк. Бөгөн райондың бөтә мәктәптәрендә лә тиерлек (Уфимск, Подольск, Ивановка һәм Әбеш мәктәптәренән башҡа) малсылыҡ һөнөрҙәренә өйрәтеү буйынса кластар булдырыу тураһындағы мәсьәләә насар хәл ителә.

Районда туранан-тура производство участкаларында 4—10-сы кластар уҡыусыларының етештереүсәнле хеҙмәтен ойоштороу өсөн 600 эш урыны булдырылған.

Ләкин был эш урындарынан практик файҙа бик аҙ. Тураһын әйтергә кәрәк, был эш урындары бер кем тарафынан да аттестацияланмаған һәм уларҙа уҡыу процесы тейешле ойошторолмаған. Һаҡмар, Салауат исемендәге, Фрунзе исемендәге колхоздарҙың ремонт мастерскойҙарында, «Маҡан» совхозының Мәмбәт, «Аҡъяр» совхозының Самар бүлексәләрендә улар ойошторолмаған. Мәктәптәр һәм база предприятиелары төҙөүселәр әҙерләү һәм ҡыҙҙарҙы ҡатын-ҡыҙҙар һөнөрҙәре—натыусылар, кулинарҙар, тегенселәр, штукатур-малярҙар һәм башҡаларға өйрәтеү өсөн эш урындары булдырыу йәһәтенән насар эшләй. Йәғни, ҡыҙҙарҙы ауылда ҡалдырыу тураһында хәстәрлек күрмәйбеҙ.

Ҡайһы бер мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың 50 процентының хужалыҡта йәшәргә һәм эшләргә ҡалыуы тураһында ҙур хәбәр итеп һөйләйҙәр. Ә был 50 процентҡа кемдәр инә һуң? Улар — бөтәһенән элек бер ергә лә урынлаша алмаған һәм ата-әсәләрендә ваҡытлыса «ҡунаҡлаған» балалар. Анализ күрһәтеүенсә, бер-ике йылдан һуң ошо 50 процеттың 20 проценты тирәһе генә хужалыҡтарҙа ҡаласаҡ.

Быйыл мәктәпте тамамлаусыларҙың 22 процентты үҙ пландарын тыуған ауылы, хужалығы, районы менән бәйләргә теләк белдерҙе. Ике-өс йылдан һуң уларҙың күпмеһенең ысын ниәнсе, малсы, эшсе булып китәсәген беҙ белмәйбеҙ әле.

Мәктәптәрҙә бөтә тәрбиәүи эштең һөҙөмтәләре, йөмғаҡтары бына шундай. Шул уҡ ваҡытта, кадрҙар етешмәгәнлектән, бөгөн ауыл хужалығы, промышленность, төҙөлөш һәм хеҙмәт күрһәтеү өлкәһенең артабанғы үҫеше тоттарлана. 5—10 йылдан һуң район экономикаһын һәм культураһын бөгөнгө ошо уҡыусылар алға ебәрмәһә, башҡа кемгә ҡарап өмөт итергә?

Эшселәр һәм колхозсылар әҙерләүҙең бөтә формаларын һәм методтарын файҙаланып эшләргә кәрәк. Тимәк райондың партия, совет, хужалыҡ органдарына үҙ хужалығының, коллективының киләсәге, егеттәр һәм ҡыҙҙарҙың ауылда ҡалыуы өсөн, эште мәктәп эскәмйәһенән башларға кәрәк.

Уҡыусыларҙың производство бригадалары эшен ойоштороуҙа ла хәл ителмәгән проблемалар байтаҡ. Уфимск, Маҡан, Мәмбәт һәм Әбеш урта мәктәптәренең генә уҡыусылар бригадалары эшен ойоштороу талаптарға яраҡлы, тип әйтеп була.

«Таналыҡ» совхозының Подольск урта мәктәбе Ленин исемендәге колхоздың Ивановка урта мәктәбе, «Маҡан» совхозының Мәмбәт урта мәктәбе менән аренда подряды, хужалыҡ иҫәбе һәм үҙ-үҙеңде финанслау принциптарында уҡыусылар производство бригадаларын һәм ярҙамсы хужалыҡтарҙы төҙөү буйынса берҙәм эшләүе игтибарға лайыҡ. Аренда йәки индивидуаль подряд шарттарында эшләүсе ғаилә звенолары составына үҙҙәренең уҡып йөрөгән балаларын индерергә теләгән ата-әсәләргә һәр яҡлап булышлыҡ итергә кәрәк. Мәҫәлән, «Новый путь» колхозынан Ф. Г. Хәсәновтың ғаилә̂е дүрт инә суҫка һәм 50 быҙау алып үҫтереүгә һәм һимертеүгә колхоз менән договор төҙөшкән. Пәки Фрунзе исемендәге колхоздан ғаилә подряды шарттарында йәш ыйыр малдарын һәм суҫкаларҙы һимертеүгә алған И. В. Бохарбаев менән Ә. Ғ. Баҡтыбаевтарҙың ғаиләләрен миҫалға килтерергә мөмкин.

Ләкин был өс ыңғай тәжрибә киң таралыу тапмаған әле. Бүребай, Атингән урта, Әбүбәкир, Бүребай, Быҙаулыҡ, Вәлит һәм Сәғит һигеҙ йыллыҡ мәктәптәре директорҙары база предприятиелары һәм хужалыҡтар —«Красный доброволец», «Красное знамя» колхоздары, «Аҡъяр», «Хәйбулла», «Маҡан» совхоздары, Бүребай руда идаралығы һәм Хәйбулла ГРП-ны етәкселәре менән уҡыусылар производство бригадалары һәм мәктәптәрҙең ярҙамсы хужалыҡтары эшен ойоштороуға һаман аныҡлыҡ индермәйҙәр. Пәйге ҡаныҡулда суҫҡа балалары һәм мәл алып үҫтереү йәһәтенән ҡулай мөмкинлектәр ҡулдан ысҡындырыла. Бригадалар аҙаларының хеҙмәте һәм ялы өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыу буйынса конкрет аҙымдар яһалмай. Бөгөн Подольск һәм Уфимск урта мәктәптәренең генә үҙҙәренең культстандары бар, «Маҡан» совхозы быйыл Мәмбәт урта мәктәбе уҡыусылары өсөн культстан төҙөргә планлаштыра. Хужалыҡтарҙа квалификацияһыҙ, хеҙмәт хаҡы түбән һәм ауыр булған эштәрҙе башҡарыусы һигеҙ йыллыҡ мәктәптәрҙең уҡыусылар звеноларына ҡарата ҡарашты тамырынан үҙгәртеү талап ителә. Балаларҙың етештереүсәнле хеҙмәтен ойоштороу, бөтәһенән элек тәрбиәүи маҡсат ҡуйыла — уларҙа йәмғәнәтка файҙалы хеҙмәткә ынтылышмалы ынтылыш формалаштырыу, экономик фекерләргә, производство процесында хеҙмәт сығымдарына, материаль һәм финанс ресурстарына экономик күҙлектән анализ яһарға өйрәтеү, уларҙа һуңғы һөҙөмтә өсөн ынтылыш һәм материаль ҡыҙыҡһыныу тойғоһо тыуҙырыу талап ителә.

ЛАЙЫҠЛЫ АЛМАШ ӘҘЕРЛӘРГӘ

Уҡыусыларҙа интернациональ-патриотик тойғо тәрбиәләү, уларҙы хәрби хеҙмәткә әҙерләү торошо бөгөн етди борсолоу тыуҙыра. Хәҙер күп кенә ваҡиғаларҙы һәм фактларҙы дөрөҫ аңларға, әлеккесә йәшәүҙән баш тартырға кәрәк. Политбюро ағзаһы, КПСС Үҙәк Комитеты секретары Е. К. Лигачевтың докладындағы тәнкит быға сағыу миҫал булып тора, сөнки беҙҙең республика партия ойошмаһында балаларҙы туған теленә уҡытыуға игтибар йомшартылды.

Был партия өлкә комитетының элекке етәкселеге тарафынан ебәрелгән хаталар беҙҙең районда ла сағылыш таппай ҡалманы. Уйламайынса, ашығыс ҡарарҙар ҡабул итеү һөҙөмтәһендә, беҙҙә лә күп кенә башҡорт мәктәптәре бөтөрөлгәйне. Хәҙерге ваҡытта уҡыусыларҙың өстән бер өлөшөнән әҙерәгә генә үҙенең тыуған башҡорт теленә шөғөлләнә, ә беҙҙең районда халыҡтың милли составында башҡорттар 60 процент тәшкил итә. Уҡыусыларҙы интернациональ рухта тәрбиәләйбеҙ, тигән булып, күп кенә мәктәптәрҙә үҙ теле, тарихы һәм культураһынан баш тарттылар. Милли нигилизм ныҡлы урын алды. Параллель башҡорт кластары йәки группалары булған мәктәптәрҙә йәшерен рәүештә уларҙы үҫеш яғынан ҡалышҡан балалар һәм тәжрибәһе аҙ булған педагогтар менән комплектлау практикаға индерелде, ә был нһә ошо кластар һәм группаларҙың абруйын кәметте һәм йәмәғәтселектә, был кластар, хатта балаларҙы башҡорт теленә уҡытыу перспективаһыҙ, тигән фекер формалаштырҙы.

Партия райкомына, партия ойошмаларына, РОНО-ға һәм педагогия коллективтарына уҡытыу-тәрбиә процесындағы ошо хаталарҙы төҙәтергә кәрәк. Үҫмер быуында юғары граждан лыҡ тойғоһо тәрбиәләүҙә башҡорт халҡының бай традицияларын, уның тарихын һәм культураһын өҫта файҙаланырға, тыуған яҡты өйрәнергә ынтылыусы кешеләрҙе һәр яҡлап дәртләндерергә, шул уҡ ваҡытта халыҡтың рус телен — милләттәр араһында аралашыу телен—өйрәнергә тырышыуын хупларға кәрәк. Ниндәй телдә уҡытыу тураһындағы һорауҙы Ленин күрһәтмәләренән сығып хәл итеү талап ителә.

Йәштәрҙе хәрби хеҙмәткә әҙерләү һөҙөмтәләре күп кенә мәктәптәрҙә был эштең тейешле кимәлдә алып барылмауын күрһәтә. Был мәсьәлә партия ойошмалары, ВЛКСМ райкомы, хужалыҡ, совет органдары һәм уҡытыусылар коллективтары тарафынан берлектә хәл ителмәй. Призывниктарҙың белем кимәле түбән.

Мәҫәлән, комплекслы республика комиссияһы 1-се Аҡъяр, Бүребай, Татыр-Үҙәк урта мәктәптәрендә башланғыс хәрби әҙерлек кәнәғәтләнерлек түгел тип баһаланы. Әбеш, Ғәлиәхмәт, Подольск, Целинный, 2-се Аҡъяр урта мәктәптәрендә һәм 110-сы СПТУ-ла ла эштәр яҡшынан түгел. Уҡыусыларҙы физик яҡтан сыныҡтырыуға етди игтибар бирергә кәрәк. Былтыр, контроль тикшереү барышында, призывҡа тиклемге йәштәрҙең 30 процеттан 50 процентҡа тиклеме ГТО комплексы нормативтарын үтәй алманы.

Уҡыусы йәштәргә белем биреүҙе ойоштороуҙа етди кәмселектәргә юл ҡуйыу, һауыҡтырыу, физкультура-спорт сараларына тейешле игтибар бирмәү — бының төп сәбәптәренең береһе. Медицина тикшереүе һөҙөмтәһендә 700 үҫмерҙең 288-енең насар күреүе, йөрәк һәм нервы ауырыуҙарының, башҡа етди кәмселектәрҙең булыуы асыҡланды. Бөгөнгө көндә уларҙың 78-е генә дауаланған.

Үрҙә әйтелгәндәрҙән сығып, мәктәптәрҙә балаларҙы йылы аш менән тәьмин итеүҙең уҡыусыларҙың һаулығын нығытыуға мөһим әһәмиәткә әйә булыуын билдәләп үтергә кәрәк. Бөгөнгө көндә 29 ашханала уҡыусыларҙың 49 проценты ғына туҡлана. Бакаловка, Сәғит, Ҡултанғужа, Яковлевка, Садовый, Савельевка һигеҙ йыллыҡ мәктәптәрендә биналарҙың һәм ашхана йыһаздарының булмауы һөҙөмтәһендә балалар туҡлана алмай. Мәктәп ашханаларын технологик ҡоролмалар менән тәьмин итеү мәсьәләһе аҡрын хәл ителә. Бөгөнгө көндә 7 электр плитәһе, 9 электр ҡазаны, 9 электр ярҙамында һыу ҡайнатҡыс етешмәй.

Райсовет башҡарма комитетына, халыҡ мәғарифы бүлегенә, район потребителдәр йәмғәнәтенә, база хужалыҡтары һәм халыҡ депутаттарының ауыл Советтары менән берлектә уҡыусыларҙы йылы аш менән тәьмин итеү мәсьәләләрен оператив хәл итергә кәрәк.

МӘКТӘП ҺӘМ ҒАИЛӘ

Мәктәп реформаһының эффектлылығын күтәреү тураһында хәстәрлек күреп, уҡыусыларға эстетик һәм әхлаҡ тәрбиәһе биреү-тураһында ла оноторға ярамай. Был йөнәлештә кластан һәм мәктәптән тыш эштәрҙе яңы позициянан сығып баһаларға кәрәк. Сөнки йыш ҡына тәрбиә эшенең эффектлылығы төрлө түңәрәктәргә һәм секциялар̂ға йәлеп ителгән балалар һанынан сығып баһалана. Мәктәптәр, культура ағартыу учреждениелары һәм спорт ойошмалары үҙ-ара килешеп эшләмәй. Район үҙәгендә, Бүребай поселогында һәм башҡа ауылдарҙа йәштәрҙең эшһеҙлеге һөҙөмтәһендә тәртип боҙоуҙар булып тора.

Бөгөнгө көндә район эске эштәр бүлегенең балиғ булмағандар эше буйынса инспекцияһында 65 үҫмер иҫәптә тора. Дәүләт һәм шәхси милекте урлау, спиртлы эсемлектәр эсеү фактттары күҙәтелә. 2-се Аҡъяр һәм Подольск урта мәктәптәре, 110-сы СПТУ уҡыусылары араһында урлашыусылар бар. Был үҫмерҙәр уголовный яуаплылыҡҡа тарттырыласаҡ. Әбеш, Ғәлиәхмәт, Атингән урта мәктәптәре уҡыусылары араһында өй шарттарында әҙерләнгән спиртлы эсемлектәр эсеү осраҡы йышайҙы. Был тәрбиә эшенең тейешле кимәлдә булмауын раҫлай. Шуға күрә ғаилә проблемаһына етди игтибар бирергә кәрәк. Районда һәр алтынсы йәш ғаиләнең тәуге йылда уҡ тарҡалыуы, йөҙәрләгән балаларҙың ата-әсәйеҙ ҡалыуы нормаль күренеш түгел, әлбиттә. Һуңғы ике йылда 183 никахһыҙ тыуған бала, балиғ булмаған үҫмерҙәр араһында 18 никах теркәлгән.

Бөгөнгө көндә «әсәләре» тарафынан ташлап ҡалдырылған йөҙәрләгән балаларҙың тәрбиәгә мохтаж булыуын оноторға ярамай. Опекаға алынған 50 бала ронола иҫәптә тора, уларҙың 16-һының ата-әсәһе юҡ, ә ҡалғандары, ата-әсәһе булып та, туғандары тәрбиәһендә йәшәй.

Тағы бер борсоулы мәсьәлә. Һүҙ насар йәшәгән ғаиләләр тураһында бара. Уларҙың 31-е иҫәпкә алынған. Һуңғы биш йылда 5 кешенең ата-әсәлек хоҡуғынан мәхрүм ителеүен, 2 ғаилә балаларының тартып алыныуын, һөҙөмтәлә 27 баланың балалар йорттарына һәм интернат-мәктәптәргә урылаштырылыуын билдәләп үтергә кәрәк. 1987—1988 йылдарҙа ата-әсәлек хоҡуғынан мәхрүм итеү һәм балаларын тартып алыу фактттарының булмауы борсолоу тыуҙыра. Был нһә беҙҙә насар йәшәгән ғаиләләр бик аҙ булыуын аңлатмай. Балаларын тәрбиәләү менән бөтәнләй шөғөлләнмәгән ата-әсәләр ҙә бар. «Хеҙмәт байрағы» район газетаһында яҙылған Урыҫбай ауылындағы шундай ғаиләләрҙең береһе быға асыҡ миҫал булып тора. Ләкин бындай ата-әсәләр тейешле органдарҙың, беренсе сиратта халыҡ депутаттарының район (Байтуҡаров иптәш), поселок һәм ауыл Советтары башҡарма комитеттары янындағы балиғ булмағандарҙың эштәре буйынса комиссияларҙың игтибарынан ситтә ҡала, даими рәүештә эскелек менән шөғөлләнеүсе, әхлаҡһыҙ тормош алып барған ата-әсәләргә ҡарата талапсанлыҡ күрһәтелмәй.

Партия комитеттары һәм хеҙмәт коллективтары был йөнәлештә тейешле эш алып бармай. Был осраҡта партия ағзалары өлгө күрһәтергә тейеш. Урындарҙа коммунист ата-әсәләрҙән балаларын нисек тәрбиәләүҙәре, предприятиелар етәкселәренең ғаиләне нығытыу һәм һәр яҡлап үҫтереү өсөн шарттар булдырыу буйынса нимәләр эшләүҙәре тураһындағы отчеттарын тыңлауҙы практикаға индерергә кәрәк.

ХАЛЫҠ МӘҒАРИФЫ СТРУКТУРАҺЫН КАМИЛЛАШТЫРЫУ

Үҫмер быуынға белем биреүҙә һәм уларҙы тәрбиәләүҙә тәрән үҙгәрештәрҙе тормошҡа ашырыу өсөн халыҡ мәғарифының бөтә системаһы менән идара итеүҙе тамырынан үҙгәртеп ҡороу талап ителә. Халыҡ мәғарифы буйынса СССР Дәүләт комитеты төҙөлгән. Башҡортостанда Мәғариф министерствоһы менән профессиональ белем биреү буйынса Дәүләт комитеты Халыҡ мәғарифы министерствоһына берләштереләсәк, беҙҙең районда ла шулай эшләнәсәк. Уҡыу йылы башланғанға тиклем, уҡытыусыларҙың август конференцияһында, халыҡ мәғарифы буйынса район советы һәйларға кәрәк, ул мәктәптәр, 110-сы СПТУ һәм мәктәпкәсә йәштәге балалар учреждениелары менән етәкселек итәсәк. Совет шулай уҡ уҡытыу һәм тәрбиә эшенең алдынғы тәжрибәһен киң таратырға, дөйөм белем биреү кимәлен үҫтерергә, уҡыу йорттарының материаль базаһын нығытыуҙа ярҙамлашырға тейеш. Хәҙерге халыҡ мәғарифы бүлеге аппараты советтың эшсе органы функцияһын башҡарасаҡ. Шул уҡ ваҡытта мәктәптәрҙең үҙ советтарын төҙөргә кәрәк, улар уҡытыусыларҙы, уҡыусылар, йәмәғәт ойошмалары, ата-әсәләр, хеҙмәт коллективтары вәкилдәрен берләштерергә тейеш.

Был советтар киң демократик башланғыста уҡытыу-тәрбиә һәм финанс-хужалыҡ эшмәкәрлеге мәсьәләләрен тикшереү хоҡуғына эйә.

Бөгөнгө шарттарҙа халыҡ мәғарифын камиллаштырыу һәм тамырынан үҙгәртеп ҡороу өсөн партия етәкселеге талап ителә. Бының өсөн беренсе сиратта мәктәптәрҙең партия ойошмаларының ойоштороу-политик кимәлен күтәрергә, уларҙы яңы көстәр менән нығытырға кәрәк. Был мәсьәләне урынынан ҡуҙғатырға ваҡыт етте. Уҡыш һөҙөмтәләре ошо эштең ниндәй кимәлдә булыуына бәйле. Сөнки бөгөнгө көндә 750 уҡытыусының ни бары 146-һы ғына КПСС ағзаһы булып иҫәпләнә. Садовый һәм Первомайск кеүек күп кенә мәктәптәрҙә бер генә коммунист та юҡ, ә Атингән, Ғәлиәхмәт урта, Сәғит, Вәлит, Федоровка, Бакаловка, Яковлевка һигеҙ йыллыҡ мәктәптәрендә бер̂әр генә коммунист бар. 34 урта һәм һигеҙ йыллыҡ мәктәптәр директорҙарының 19-ы партия ағзаһы түгел.

* * *

КПСС Үҙәк Комитетының февраль Пленумы халыҡ мәғарифын сифатлы яңы рубеждарға күтәреү буйынса дөйөм партия, дәүләт әһәмиәтендәге мөһим мәсьәләне билдәләне.

Беҙ, тиҫне докладсы һүҙен йомғаҡлап, район партия ойошмалары, бөтә коммунистар Пленум ҡарарҙарын ваҡытында һәм тулыһынса тормошҡа ашырыр, халыҡ мәғарифы менән партия етәкселеген тамырынан яҡшыртыр, үҫмер быуынға белем биреү һәм уларҙы тәрбиәләүҙә бөтә предприятиелар һәм ойошмалар, совет, профсоюз һәм комсомол ойошмаларының яуаплылығын арттырыр, тип ышаныс белдерәбеҙ. Был мөһим мәсьәләне беҙҙең йәмғәнәтебеҙ, уның киләсәге мәнфәғәтендә хәл ителергә тейеш.

Балаларҙың яҙғы байрамы

МӘКТӘПТӘРҘЕҢ ауыл хужалығы производство-ны менән бәйләнеше йылдан-йыл нығый. Уҡыусыларҙың производство бригадалары үҙҙәренең база хужалыҡтарына һиҙелерлек ярҙам күрһәтә. Уҡыусылар быҙауҙар, бәрәстәр баҡа, һаунысыларҙың ярҙамсылары булып эшләй, ә ҡайһы саҡта уларҙы тулыһынса алмаштыра. Беҙҙең мәктәптәрҙә профессиональ йүнәлеш биреү ауыл хужалығында үҙенең лайыҡлы урынын тапты. Шуға күрә яҙҙың һуңғы көндәрендә балалар һабантуйын үткәреү изге традицияға әүерелде. Халыҡ ижады һәм халыҡ йолаларының идея-художество кимәлен күтәреү, уҡыусыларҙың хеҙмәт һәм физик активлылығын үҫтереүгә йоғонтоһон арттырыу, үҙешмәкәр ижад занятиеларына ылыҡтырыу, массовый байрамдарҙа ҡатнашыу, пионер һәм комсомол ойошмаларының уҡыу йылына йомғаҡтар яһау, ошо осорҙа уларҙың ниндәй белем алыуына, нимәгә өйрәнеүенә һәм күнегеүенә һынау мәҡсәт итеп ҡуйыла. Был — иң яҡшы пионер отрядтары һәм дружиналарының, иң яҡшы комсомол ойошмаларының смотры.

Мәктәптәр, пионер дружиналары, комсомол ойошмалары, художестволы үҙешмәкәрлек коллективтары, спортсылар, балалар баҡсалары коллективтарының парады башлана.

Алда — байраҡ тотоусылар — район комсомол, пионер ойошмаларының байраҡтары. Уларҙы уҡыу алдынғылары, иң яҡшы комсомолсылар һәм пионерҙар тотоп килә. Район комсомолияһы һәм пионерияһы ошо байраҡтар аҫтында байтаҡ лайыҡлы эштәр башҡарҙы, үҙҙәренең сафында хеҙмәт геройҙарын, ударниктарын тәрбиәләп сығарҙы. Улар — КПССтың XXVII съезы, ВЛКСМ-дың XVII съезы делегаты, Социалистик Хеҙмәт Геройы Килдебай Сәләймәнов, ВЛКСМ-дың XX съезы делегаты Әнүәр Маншев, Пәштәр һәм студенттарҙың Гаваналағы XI Бөтә донъя фестивалендә ҡатнашыусы Ғәйнетдин Ҡужин, йәштәр һәм студенттарҙың Мәскәүҙәге XII Бөтә донъя фестивалендә ҡатнашыусы Хәйҙәр Юзеев, күп кенә өлкә һәм район конференциялары делегаты Салауат Аблаев һәм башҡа күптәр.

Байрам колоннаһы «Уҫыш» стадионының йәйге эстрадаһы алдына тәҙәләй. Сәхнәлә — КПСС райкомы аппараты, райсовет башҡарма комитеты, ВЛКСМ райкомы работниктары. Байрамды комсомол райкомының беренсе секретары Т. Р. Алтынбаев аса: «Районыбыҙ пионерияһы үҙенең байрамын яҡшы уҡыуы, йәмәғәт тормошонда актив ҡатнашыуы менән ҡаршылай, уҡыусыларҙың 40 процеНты «4» һәм «5» билдәләренә генә уҡый. Уларҙың күптәре отряд, дружина эштәрендә актив ҡатнаша. Улар — пионерҙар Уфимск урта мәктәбенән Лилия Фәниева һәм Вера Әлмәтова, Первомайск һигеҙ йыллыҡ мәктәбенән Мәфрүзә Сабитова, Бүребайҙан Люда Шишкина, 1-се Аҡъяр мәктәбенән Әминә Ҡоҙабаева, Целинныйҙан Ирина Зевахина, Татыр-Үҙәктән Юля Хвостова һәм башҡа күптәр. Яҡшы уҡығандары өсөн Подольскийҙан Наташа Низдомикова, Степнойҙан Илгиз Тажетдинов, Илөстән Алик Рәхмәтов, Садовыйҙан Ольга Шпенькова, Әбүбәкир һигеҙ йыллыҡ мәктәбенән Зиннур Әлибаевтар «Артек», «Орленок» һәм «Океан» пионер лагерҙарына путевкалар менән наградланды. 2-се Аҡъяр, Бүребай урта һәм Садовый һигеҙ йыллыҡ мәктәптәренән башҡа, бөтә пионерҙар ҙа база хужалыҡтарына ярҙам итә. Металл һыныҡтары һәм макулатура йыйып, уҡыусылар «Пионерҙар — ун икенсе биш йыллыҡҡа» тигән операцияла актив ҡатнаша. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, пионерҙар «Пәшәл аптека» ла ҡатнашмай. Бында тик Әбеш урта мәктәбенән Ю. Гагарин исемендәге дружинаны ғына телгә алырға мөмкин.

Бүребай һигеҙ йыллыҡ, Подольск, Целинный, Уфимск урта мәктәптәре пионерҙары, «Ватан» операцияһында ҡатнашып, Афғанстан балаларына мәктәп кәрәк-яраҡтары, уйынсыҡтар менән посылка ебәрҙе. Тимурсылар мактау һүҙҙәренә лайыҡ».

Балалар һабантуйы асыҡ тип иғлан ителә. Гимн уйнауы аҫтында уҡыу отличниктары Женя Алябьева, Ольга Шипкова, Павел Тынников, Женя Щпенькова һәм Женя Рыбальченко һабантуй флагын күтәрәләр.

Райсовет башҡарма комитеты председателе урынбаҫары Ш. М. Байгусҡаров байрамдың асылыуы менән ҡотланы. Уҡыусылар исеменән 1-се Аҡъяр урта мәктәбе уҡыусыһы Гөлназ Сәйфуллина сығыш яһаны.

110-сы СПТУ уҡыусылары сәхнәгә тәҙәләй. Хеҙмәт ветераны Михаил Никитич Шаховка уларҙы ҡотлау һәм игенсегә баҫышлау һүҙе бирелә. «Беҙгә, өлкән быуынға, — тине ул, — беҙҙең сиҙәм ерҙәрҙе үҙләштереү бәхете тейҙе. Һәм бына бөгөн, эстафета итеп, һеҙгә бер ус хәйбулла тупрағын тапшырам. Беҙ үҙебеҙгә тейешлеһен эшләнек, хәҙер һеҙҙең сират». Нәш игенселәрҙең анты яңғырай.

Культура-спорт программаһы иғлан ителә. Һабантуйҙың иң ҡыҙыҡлы өлөшө — спорт ярыштары, ат сабыштары, милли көрәш һәм башҡа төрлө уйындары башлана.

Спорт саралары, уҡыусыларҙың Спартакиада программаһы рамкаһында үткәрелде. Эстафета бик ҡыҙыҡлы үтте, балалар коллективизм тойғоһо менән үҙ командаларының намыҫын һаҡларға тырышты. Бүребай урта һәм Быҙаулыҡ һигеҙ йыллыҡ мәктәптәре уҡыусылары таҡыллыҡ, етеҙлек күрһәтеп, беренсе урындарҙы яуланы һәм күсмә кубокҡа лайыҡ булды.

Эстафетаның массовыйлылығын билдәләп үтмәү мөмкин түгел, ләкин ҡайһы бер мәктәптәрҙең ярышҡа бөтөнләй әҙерлекһеҙ килеүе күңелде ҡыра.

Еңел атлетика ярыштары байрамдың төп өлөшөн биләне. Урта һәм һигеҙ йыллыҡ мәктәптәр уҡыусылары 100 метрлыҡ араlыҡта уҙышты. Был осраҡта Бүребай урта мәктәбенән П. Трикилов менән С. Горе-ловалар яҡшы әҙерлекле булыуҙарын күрһәттеләр, дистанцияны 11,8 һәм 13,8 секундта үтеп, призлы урындарҙы яуланылар. Һигеҙ йыллыҡ мәктәптәр уҡыусылары араһында Ҡултанғужанан И. Рахманиолов, Садовыйҙан Н. Ишмилдиналарға тиң булманы.

Бүребай урта мәктәбенән П. Трикилов 400 метрлыҡ дистанцияла яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәште, ә ҡыҙҙар араһынан Целинный урта мәктәбенән Г. Калинина был аралыҡты иң ҡыҫҡа ваҡытта үтте. Һигеҙ йыллыҡ мәктәптәр араһынан Ҡултанғужанан Х. Усманов, Яковлевканан И. Алексеевалар беренселектә яуланы.

Бүребай урта мәктәбе уҡыусыларының балалар һабантуйына яҡшы әҙерләнеп килеүҙәрен билдәләп үтергә кәрәк, сөнки улар бик күп призлы урындарҙы яуланы. Мәҫәлән, оҙонлоҡҡа һикереү буйынса ошо мәктәптән Н. Юнысов, Л. Кривенкова ..., бейеклеккә һикереү буйынса ҡыҙҙар араһынан У. Баязитова юғары һөҙөмтәләргә өлгәште.

Ярыштың был төрө буйынса Первомайскийҙан А. Күсәков, Степнойҙан Н. Саптарьяпова, Садовый һигеҙ йыллыҡ мәктәбенән Г. Ҡоҙабаева, 2-се Аҡъяр урта мәктәбенән А. Илембәтов призлы урындарҙы алды.

Ә бына Ивановка, Мәмбәт, Подольск, Самар, Татыр-Үҙәк, Әбеш урта мәктәптәре уҡыусыларының спорттың был төрө буйынса насар әҙерләнеп килеүҙәрен әйтеп үтеү кәрәк.

Пневматик винтовканан атыу буйынса ярыш бик ҡыҙыҡлы үтте. 1-се Аҡъяр урта мәктәбенән Г. Илембәтов, Әбеш мәктәбенән З. Торошова, Сәғит һигеҙ йыллыҡ мәктәбенән Д. Кәйиповтар иң мәргәндәр булып сыҡты.

Диктор ат ярышының башланыуы тураһында иғлан итә.

Һыбайлылар ярышы бер кемде лә битараф ҡалдырманы. Спорттың был төрөн һәр кем яратып ҡарай. Бына 4 километр аралыҡта, елдәй елеп, арғымаҡтар саба. Федоровка урта мәктәбе уҡыусыһы Л. Чурилкин «Аркаша» ҡушаматлы атында беренселекте яулай. Уның күпкә ҡалышмай 1-се Аҡъяр урта мәктәбенән Ф. Әлмөхәмәтов, Степной мәктәбенән Р. Таһировтар финишҡа яҡынлаша.

Көрәшселәр келәме янында өс һарыҡтың бәйле тороуы тамашасыларҙың иғтибарын йәлеп итә. Бында көрәш батырҙары көс һынаша. Үҫмерҙәр үҙ мәктәптәренең намыҫын һаҡлап, келәмгә сыға. Көс һынашырға теләүселәр байтаҡ. Шулай ҙа 1-се Аҡъяр урта мәктәбенән С. Катков, Атингәндән К. Искужин, Маҡан мәктәбенән Ю. Юлдашбаевтарға тиң табылманы, улар төрлө ауырлыҡ категориялары буйынса көрәшеп, еңеү яуланы һәм һарыҡтар менән бүләкләнде. 1-се Аҡъяр урта мәктәбенән И. Дәүләтбаев, Байғусҡар һигеҙ йыллыҡ мәктәбенән В. Торомтаев үҙ категориялары буйынса призлы урындарҙы яуланы.

Велоспедта уҙышыуҙа 11 ҡыҙ һәм 13 малай ҡатнашты. Был бәйгеләә Ҡултанғужа һигеҙ йыллыҡ мәктәбенән Ф. Искаҡова, Степной урта мәктәбенән А. Тажетдинов еңеүселәр булды.

Тамашасылар волейбол ярышын яратып ҡараны. Бүребай урта мәктәбе командаһы оҫта уйнауы менән айырылып торҙо һәм призлы урынды яуланы, Маҡан, 2-се Аҡъяр урта мәктәптәре командалары икенсе, урындарҙы алды.

Бүребай урта һәм Ҡултанғужа һигеҙ йыллыҡ мәктәптәре командалары дөйөм команда зачетында беренсе урындарҙы яуланы.

Мәктәптәрҙең художестволы үҙешмәкәрлек коллективтары сығыштарын һәр кем киноәнә ҡараны. Пионерҙар йорто һәм 1-се Аҡъяр урта мәктәбенең бейеү коллективтары бигерәк тә уҡышлы сығыш яһаны. Поморовский мәктәбенән Ибраһимовтарҙың башҡорт һәм Целинный урта мәктәбе уҡыусыларының «Перовский» бейеүҙәре һәр кемгә оҡшаны. Первомайск мәктәбенән А. Күсәпова уңышлы сығыш яһаны. Степной урта мәктәбенән А. Илбаҡтиндың сығышы һәр кемгә хуш килде. Тамашасыларға Татыр-Үҙәк урта һәм Әбүбәкир һигеҙ йыллыҡ мәктәптәренең вокаль ансамблдәре йырҙары бик оҡшаны. 2-се Аҡъяр урта, Быҙаулыҡ һигеҙ йыллыҡ мәктәптәренең фольклор группалары яҡшы әҙерләнеп килгән, шулай уҡ Садовый һигеҙ йыллыҡ мәктәбенең ҡурайсылары уңышлы сығыш яһаны.

Стадиондан алыҫ түгел урынға тирмәләр королған. Иҫәнгилде һигеҙ, Мәмбәт һәм Целинный урта мәктәптәренең был үҙенсәлекле конкурсҡа яҡшы әҙерләнеп килеүҙәрен билдәләп үтергә кәрәк.

Балалар һабантуйында төрлө тауарҙар һатыу ойошторолдо. Ләкин байрамды ойоштороусылар район мәктәптәренән килгән уҡыусыларҙы туҡландырыу тураһында тейешле хәстәрлек күрмәгән, ә байрам киско тиклем дауам итте.

Дөйөм алғанда, балалар һабантуйы юғары кимәлдә үтте. Ул һәр кемдең күңелендә яҡшы тойғо ҡалдырғандыр, тип ышанғы килә.

Материалды Р. ИМАНҒОЛОВ менән М. КУСӘКОВ әҙерләне.

ҺҮРӘТТӘРҘӘ: ат ярышында еңеүсе Л. Чурилкин; милли көрәш призерҙары.

Зәңгәр экран

Иәкшәмбе, 5 июнь

1-се программа

7.45 — Ритмик гимнастика. 8.30 — «Валериан Куйбышев». Телевизион фильм. 8. 50— «Спортлото» тиражы. 9.00 — «Будильник». 9.30 — «Советтар Сәйәсәтенә хеҙмәт итәм!» 10.30 — «Иртәнге почта». 11.00 — Сәйәхәтселәр клубы. 12.00 — Музыкаль киоск. 12.30 — Ауыл сәғәте. 13.00 — «Сәләмәтлек». 14.15— «Ералаш» киножурналы. 14.35 — Документаль фильм премьераһы. 15.30 — Концерт. 16.30 — Киноафиша. 17.30 — Халыҡ-ара панорама. 18.15 — Пәкшәмбе кинозалы. 19.00 — Нәфис фильм «Беҙ күңелле, бәхетле, талантлы».

Редакторы Б. Ғ. НАЗАРҒОЛОВ.

КОТЛАЙБЫҘ!

Ҡәҙерле ирем, атайыбыҙ һәм ҡартатайыбыҙ **Ғәзизйән Шәрифулла улы Аҡбалинға** 55 йәш тула. Уға нығлы һаулыҡ, шатлыҡ һәм оҙон ғүмер теләйбеҙ.

Ҡатыны, балалары һәм ейәндәре.

Байғусҡар ауылы.

БЕЛДЕРЕҮҘӘР

3 июндә киске сәғәт 7-лә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ бинаһында «Таналыҡ» баҡсаһы ағзаларының йыйылышы үткәрелә. Вәностар индермәгән кешеләрҙең ағзалыҡ мәсьәләһе ҡараласаҡ.

1988 йылдың 23 июнендә район социаль тәьминәт бүлегендә Өфө күсмә протездар мастерскойы эшләйәсәк. Протез кәрәк булған ауырыуҙар һәм инвалидтарға күрһәтелгән ваҡытҡа райсобеска килеүҙәре һорала.

Үҙең менән бергә түбәндәге документтар кәрәк буласаҡ: паспорт, пенсия алыу танытмаһы йәки ВТЭК-тан справка, эшләүселәр өсөн эш урынынан справка, балаларҙың тыуыу тураһында таныҡлығы.

Газетаның был номерын А. МӘМБӘТОВА йыйҙы, Ф. ҠОҘАБАЕВА версткаланы. Р. ҠОҘАБАЕВ, К. СӘҒИТОВА баҫты. Корректоры Ф. ДӘҮЛӘТБАЕВА.

ВЕҘҘЕҢ АДРЕС: Аҡъяр ауылы, Сиҙәмселәр проспекты, 41.

Телефондар: редактор—2-11-95, редактор урынбаҫары, яуаплы секретарь—2-15-95, партбүлек—2-13-97, ауыл хужалығы бүлеге һәм радиохәбәрсе—2-14-95, хаттар бүлеге—2-13-95, фотохәбәрсе—2-14-98, типография директоры—2-15-62, цех—2-14-87.

Газета аҙнаһына өс тапҡыр: шишәмбе, кесаҙна, шәмбе көндәрендә башҡорт һәм рус телдәрендә сыға.

Орган Хайбуллинского райкома КПСС и районного Совета народных депутатов БАССР.

Башҡорт АССР-ы Нәшриәт, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Хәйбулла район типографияһы. Тираж 2594. Заказ № 404.